МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

# 2016-2017 укыу йылына музыкаль ойоштороу эшмәкәрлеге буйынса анализ

Музыка етәксеһе:
Ҡунаҡбаева Г.Р.

Уҡыу йылының планына индерелгән бурыстар һәм маҡсаттар минең эшемдең бөтә йүнәлештәрендә лә сағылды тип уйлайым.

Балалар менән эште башлап ебәрер алдынан иң элек уҡыу йылына план яҙҙым,дәрестәр графигы, үткәреләсәк иртәлектәр байрамдар графигы төҙөнөм.Балалар менән эшләгәндә тәрбиәселәр менән тығыҙ бәйләнеш булдырылды.Музыка дәрес-байрамдарынан тыш физик тәрбиә эшмәкәрлеге буйынса балалар баҡсаһында һәм ҡала масштабында үткәрелгән асыҡ сараларҙа ла музыка яғынан ярҙам иттем.

Тәрбиәселәр, ата-әсәләр менән берлектә төрлө темаларға иртәлектәр үткәрелде.

Яңы йыл байрамына арналған профсоюз иртәлтәре, Өлкәндәр төркөмө менән берлектә тыл һәм хеҙмәт ветерандарын балалар баҡсаһына саҡырып Еңеү көнөнә арналған профсоюз байрамын үткәрҙек.

Уҡыу йылында иртәлек-байрамдар ғына үткәреп ҡалманым буш ваҡытымда музыка кабинетын йыһазландырҙым,төрлө музыка ҡоралдары һатып алдым. Йыл әйләнәһенә төркөмдәр тәрбиәселәре менән ҡалабыҙҙа урынлашҡан театрҙарға,филармонияға йөрөнөк, балалар баҡсаһында башҡорт һәм урыҫ телдәрендә төрлө әкиәттәр,спектакльдәр,концерттар ҡараныҡ.

Үҙ-белем кимәлен үҫтереү өҫтөндә лә эш алып барҙым.Эшемдә ҙур ярҙамсы булған интернет селтәре аша яңы йырҙар,шиғырҙар менән танышып барҙым,музыка өлкәһендәге яңылыҡтарҙы белдем.Уҡыу йылына алынған бурыстарға ҡағылышлы төрлө әҙәбиәт китаптар уҡыным.Хәүефһеҙлекте һаҡлау,баланың психофизик үҫешен,гармониялы үҫешен тәьмин итеү,рухи-әхләки тәрбиә биреү дәрестәрҙә лә, иртәлектәрҙә лә өйрәнелде.Дистанцион конкурстарҙа ҡатнашып күп дипломдар алдым ,шулай уҡ интернет каталогтарына үҙемдең иртәлек сценарийҙарымды ебәрҙем.

Ҡала масштабында уҙғарылған конкурстарҙа әүҙем ҡатнаштыҡ, Педагогтар менән берлектә кино йылына арналған фестивәлдә әүҙем ҡатнашып өсөнсө урынды яуланыҡ,шулай “Йыл йомғаҡтары”нда ла әүҙем ҡатнаштым. “Чарли”бейеүе менән ҡалабыҙҙа уҙғарылған конйерт-мероприятиеларҙа

сығыш яһаным,балалар менән бергәләп ҡалабыҙҙа урынлашҡан А.Мөбәрәков исемендәге театрҙа 8 мартҡа арналған мероприятиела уңышлы сығыш яһаныҡ.Ата-әсәләр менән берлектә “Синяя птица” һәм “Ғаилә-илһам сығанағы” конкурстарында ҡатнашып призлы урындарға лайыҡ булдыҡ. Спорт фестивален “Аҡҡоштар төйәге”тип исемләнгән музыкаль композиция менән асыуға ла әҙерләндек.Ҡалабыҙҙағы 8-се урта мәктәп тығыҙ бәйләнештә эш алып барылды.12-се телмәр төҙәтеү төркөмө менән “Башҡортостан-тыуған илем!”, “Ҡоштар-беҙҙең дуҫтар” һәм 6-сы телмәр төҙәтеү төркөмө менән “Беҙ яҙҙы эҙләйбеҙ” тип исемләнгән күңел асыу саралары үткәрелде.

Шулай итеп,баланы музыкаль яҡтан тағы үҫтерегә тип мин үҙемә киләһе **бурыстар** алдым:

- Балаларҙа тирә-йүнде эстетик яҡтан ҡабул итеүҙе,музыкаль фантазияларын һәм фекерләүҙе формалаштырырға булышлыҡ итеү;
- Танып-белеү һәм ижади һәләттәрен,музыкаль яҡтан баланың уйлау,ишетеү,фекерләү һыҙаттарын үҫтерергә булыщлыҡ итеү;
- Тыуған илгә, музыка ҡоралдарына ,композиторҙарға,уларҙың ижадына ҡарата һөйөү тәрбиәләү.